# “Матур ерҙәр күп булһа ла, Ейәнсура бер генә»

Самаҙы ауылы китапханасыһы
Яҡшыбаева Розалия Урал ҡыҙы



**Самаҙы ауылының атамаһы тураһында халыҡ хәтерендә ошондай легенда ҡалған. Ырымбур далаларынан Мостафа исемле кеше Әселе йылғаһы буйлап килеп, Мырҙабулаттың кәңәше менән хәҙерге Самаҙы ауылы урынына килеп төпләнә.**

**Унының Илъяс һәм Өмөтбай тигән ҡустылары, Һолтанбикә исемле ҡатыны, өс улы булған. Бер саҡ Муйнаҡ менән Мырҙабулат Мостафаны осратҡанд а;**

**- Йә, нисек, урын оҡшаймы?, тип һораған.**

**-Оҡшаны, - тип яуаплаған Мостафа. – Һыуы Өҫкәлек менән Әселегә ҡарағанда самалы булһа ла, эҫе йәйҙә ҡоромай.**







**Ил ағаларына уның самалы тигәне ҡыҙыҡ тойолған. Шуға Мостафаны шаяртып «Самалы» күрше тип йөрөтә башлағандар. Ул нигеҙ һалған ауыл да тора-бара Самаҙыға әйләнгән.**

**Район кимэлендэ сығарылған «Ейәнсура таңдары» баҫмаһы тарафынан үткәрелгән «Ейәнсурамдың ете мөғжизәһе» акцияһы иғлан ителгәс, Самаҙы мәктәбенең башланғыс синыф уҡытыусыһы Санъяр Дәүләтбаев ауылыбыҙҙың ғорурлығы – Сыуалташты яҡлап, ошо тау тураһында халыҡ телендә һөйләнелгән бер нисә мәғлүмәт тәҡдим итә.**



Борон бейем менән килен eләк йыйырға барғанда, буш-юҡҡа зыҡ ҡубып талашып китәләр, бер-береһенә әйтмәгән һүҙ ҡалдырмайҙар, хатта – ер йотҡор, торған ереңдә таш булып ҡат!- тип бер-береһенә ҡарғыш яуҙыралар. Ҡарғыштары үҙҙәренә ҡайта, икеһе лә таш булп ҡата.





Боронғо ваҡытта самаҙыларҙы ҡырғыҙҙар баҫымтаға килеп йөҙәткән. Шуға тирә-яҡҡа һаҡ ҡуйыр булғандар. Бер ваҡыт, байтаҡ ҡына ҡырғыҙҙар баҫымтаға киләләр икән. Самаҙыраҙың йәйләүҙәренән мал-тыуар урлап алып китергә иҫәптәре. Шул ваҡыт көн бите яғынан баҫҡынсылар килгәнен күреп, көстәр тигеҙ булмағанын күреп, беҙең һаҡсылар ҡанташ өҫтөнә менергә мәжбүр булалар. Өҫтәгеләрҙе уҡ менән дә атып та алдыра алмағандар барымтасылар, ҡая шулай бейек булған. Бер батырыбыҙ ҡая өҫтөнә ут яғып ебәрә. Уттың төтөнөн күреп ҡалып, самаҙылар килеп, ҡырғыҙҙарҙы ҡыуып ебәргән. Дошман килгәнен иҫкәртеп, ут яғылған каяташты һәм уның тирә-яғындағы тауҙы Сыуалташ тип йөрөтә башлағандар. Сыуал – усаҡ, мейес тигәнде аңлата икән.



Самаҙы ауылынан йылға буйлап түбәнгә бер нисә саҡырым юл үткәс,һулға берләм юлдан бер аҙ барһаң,тауҙар теҙмәһенән айырылып, үрелеп үҫкән кеүек 25-30 метр бейеклектәге ҡая таш ҡалҡып тора.Уны Сыуалташ тип йөрөтәләр.Яҡындан ҡараһаң,унын төрлө төҫтәге таштары ифрат матур.Алыҫтан ул, ысынлап та,сыуалды(усаҡ,мейес мәғәнәһендә),берсә ҙур йоҙроҡто хәтерләтә. Яҡындан ҡараһаң,бер-береһенә һыйынған һындарға оҡшап тора:әйтерһең дә,дәүерәге - бейем,кәүҙәгә ҡайтышыраҡы-килен.Һәр әкиәттә мәғәнә булған кеүек,ҡаяның атамаһы ла,легенда үҙе лә бик кинәйәле: ғаилә усағын һаҡлаусы буларак яратылған ҡатын-ҡыҙҙың(был осраҡта килен менән бейемдең)үҙ-ара ыҙғышыуы яҡшыға алып бармауына ишаралай түгелме?



**Ҡушарлап ҡатып ҡалған һынташтар башҡаларға ғибрәт,һабаҡ булһын, тип иҫкәртеп торғандай.Эйе һәр кешегә ҡайтып һыйынырлыҡ урын,йылы усаҡ, тыныс мөйөш кәрәк.Ғаилә-ул иң оло таянысыбыҙ,иң ышаныслы һыйыныр урыныбыҙ.Һәр йәмғиәттең нигеҙен ғаилә тәшкил итә.Ғаиләләр татыу һәм ныҡ булһа,йәмғиәтебеҙ ҙә ныҡ булыр.Ә ғаилә усағын ҡатын-ҡыҙ һайлай.Ә Сыуалташ яны бик матур,унда йыуалыҡ һуҙылған,еләк тә бик күп була.Ҡаршыһында ҡайын,имән,юкә урманы,тау битләүҙәрендә төрлө сәскәләр.Ә тау үҙәненән юғары күтәрелһәң,ҡая ташлы тауҙар теҙмәһе китә.**

*Туймазы калаһында башҡорт теле һәм әҙәб.укытҡан ауылдашыбыҙ ике китап автры Гөлмирә Бикбулатованың ошо тәбиғәт комартҡыһына арналған шиғыры*

## *Сыуалташ*

**Аланғырт та сауҡа Сыуал башы,**
**Күккә ашып тора ғорур ташы**
**Албарғыта кеше күңелдәрен**
**Ауылымдың серле йөҙөк ҡашы.**
**Игеҙ ҡыҙҙар кеүек рәттән баҫҡан**
**Ҡалҡып ҡына тора түшкәһе**
**Бер итәктә ята Әүлиәкәй,**
**Бер үҙәнде буйлап шишмәһе.**
**Иртә яҙҙа шаулай йыуалары,**
**Тулҡынлана йәйен ҡылғандар,**
**Күрмәй китмә,туған, Сыуалташты**
**Трих һөйләй бейек каялар.**

Bikbulatov photography


Сыуалташтың хозур тәбиғәт ҡосағында

# Сыуалташтың итәгендә йыуаның уңған мәле



# Йәмле йәйҙең ҡыҙған сағы. Сыуалташта еләк бешкән мәл.







# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

